# Башҡорт Мифологияһында Им-Томсолар

*Folk Physicians in Bashkir Mythology*

**Фирҙәүес Г. ХИСАМИТДИНОВА**[*]

*Gazi Türkiyat, Güz 2020/27: 15-28, DOI: 10.34189/gtd.27.002*

***Öz:*** *İnsanlık tarihinin ortak bilincinin eseri olan mitoloji birçok açıdan incelenip araştırılmış bir alandır. Onun önemi insanlığın kültür dünyasını anlamakla yakından ilgilidir. Genel olarak mitolojide yer alan karakterleri efsanevi ve efsaneleştirilen karakterler olarak iki ana grupta incelemek mümkündür. Çok zengin bir mitoloji tarihine sahip olan Başkurtlarda da her iki gruba giren karakterler oldukça fazladır. Başkurt mitolojisi üzerine yapılmış bazı çalışmalarda bunlar yer almıştır. Bu çalışmada Başkurt Türkçesinde efsaneleştirilen karakterler üzerinde durulmuştur. Bunlar ilk olarak üç grupta incelenmiştir. Bu sınıflandırmanın ilk grubunu teşkil eden bĭlĭmsĭlär "falcılar" (alternatif tıpçı, falcı, büyücü, büyükbaba, sihirbaz vb.) alt grubunu da dört başlık altında incelemek mümkündür. Çalışmada bunlardan imsĭ "halk hekimi" üzerinde durulmuş. Bu alt grubu oluşturan imsĭ "halk hekimi", ŭsŭqsŭ "efsuncu", arbavsı (büyücü), ü̆şkü̆rü̆wsĭ "ürüfükçü", baqsı/bağımsı "bahşı/ büyücü" terimlerinin Başkurt mitolojisindeki anlamları, tarihî ve çağdaş lehçelerdeki şekilleri ve kökenleri ile ilgili açıklamalar verilmiştir.*

***Anahtar Kelimeler:*** *mitoloji, Başkurt mitolojisi, efaneleştirilen karakterler, halk hekimliği*

***Abstract:*** *Mythology, which is the work of the common consciousness of human history, is a field that has been studied and explored from many perspectives. Its importance is closely associated with understanding the cultural world of humanity. Generally speaking, it is probable to examine the characters in mythology in two main groups as legendary and the mythologized characters. In the Bashkirs, which have a vibrant mythological history, characters in both groups are quite varied. These have been included in some studies on Bashkir mythology. In this study, the characters that are legendary in Bashkir Turkish are examined. These were first examined in three groups. The first group of this classification consists of bĭlĭmsĭlär (fortune tellers, alternative medicine, fortune teller, sorcerer, grandfather, magician, etc.), and in the sub-group, they are under four headings. In the study, imsĭ (folk physician) was emphasized. The meanings of the terms imsĭ (folk physician), ŭsŭqsŭ (enchanter), arbavsi (sorcerer), ü̆şkü̆rü̆wsĭ (healer), baqsi/bağımsı (bahşı / sorcerer) are explained regarding their forms and origins in Bashkir mythology, historical and contemporary dialects.*

***Keywords:*** *mythology, Bashkir mythology, attributed characters, folk medicine*

Мифологияла урын алған персонаждарҙы 2 төркөмгә бүлеп өйрәнергә була. Беренсе төркөмгә – мифик, икенсеһенә мифлаштырылған персонаждар ҡарай. Мифик персонаждарҙы эпостарҙа, әкиәттәрҙә, легендаларҙа һ.б. фольклор әҫәрҙәрендә киң таралған, әммә реаль тормошта осрамаған *тәңреләр*, *эйәләр*, *төрлө яман көстәр* тәшкил итә. Мифлаштырылған персонаждар төркөмөнә

[*] *Prof. Dr., Prof. Dr., Rusya Bilimler Akademisi Ufa Federal Araştırma Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü, Ufa-BAŞKURDİSTAN/RUSYA . hisamitdinova@list.ru , orcid.org/0000-0001-5997-9928, Gönderim tarihi: 07.01.2020 / Kabul tarihi: 13.09.2020*

реаль тормошта, ысынбарлыҡта йәшәгән, әммә ҡайһы бер ирреаль сифаттарға эйә булған, халыҡ теле менән әйткәндә, юғарынан йәки яман күҙҙәр тарафынан мөһөрләнгән, тамғаланғандарҙы, нормаль әҙәмдән нимә менәндер айырылып торған кешеләрҙе индереп була.

Башҡорт мифологияһын алғанда, уның мифик персонаждар төркөмөнә *Тәңре, Һомай, Ҡояш тәңре, Ай тәңре, Самрау, Аждаһа, Албаҫты, Бисура, Шүрәле, Һыу инәһе, Тау эйәһе, Аҙбар хужаһы* кеүек ирреаль заттарҙы индерергә була (Хисамитдинова, 2010, 456). Ә инде боронғо төрки мифологияны алғанда, был төркөмгә ҡомартҡыларҙа сағылыш тапҡан *Тенгри, Умай, Йер-Суб, Эрклиг, Ай тенгри, Йол тенгри* кеүек персонаждар инә (ДТС, 1969, 676).

Башҡорт мифологияһында мифик персонаждар дөйөм алғанда өйрәнелгән. Минең хеҙмәттәрҙән тыш был өлкәлә ҡайһы бер фольклорсыларҙың, этнографтарҙың, мифологтарҙың эштәрен күрһәтеп китергә була (Хисамитдинова, 2010, 456; Хисамитдинова, 2015, 412; Хисамитдинова, 2016, 400; БХИ, 1995, 560; Сулейманова, 2005, 146; Котов, 2006, 408). Әйтергә кәрәк, боронғо төрки, шулай уҡ күп кенә хәҙерге төрки халыҡтары мифологияһының мифик персонаждары тураһында фәнни әҙәбиәт байтаҡ тупланған (МНМ, 1997 (2), 536-541; Кондыбай, 2005, 272; Якутские..., 2004, 451; Капаев, 2012, 424; Урманче, 2008, 303; 2009, 343; 2011, 199; Шукуров, 1995, 188; Ögel, 1993, 644; Тойшанулы, 2016, 248 һ.б.). Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, мифлаштырылған персонаждарға бағышланған хеҙмәттәр төрки мифологияһында, шул йәһәттән башҡорт мифологияһында ла юҡ кимәлендә. Булған эштәрҙә ғәҙәттә *кендек инәһе, ҡам* йәки *шаман* кеүек кенә персонаждар сағылыш тапҡан (Трад. миров., 1990, 209; Хисамитдинова, 2010, 456; Функ, 2005, 398).

Мифлашырылған персонаждарҙы 3 төркөмгә бүлеп өйрәнеп була. Уларҙың тәүге төркөмөн *белемселәр* (имсе, күрәҙә, баҡсы, баба, сихырсы һ.б.), икенсеһен *аҡыл, физик, социаль яҡтан кәм кешеләр* (диуана, һуҡыр, етем һ.б.), өсөнсөһөн үҙҙәре лә белмәй йәшәгән, бик һирәк кешелә осраған, ғәҙәти булмаған *серле һәләткә эйә кешеләр* (ҡул арты ауыр, юллыҡһыҙ һ.б.) тәшкил итә.

Белемселәр төркөмөнә ҡараған персонаждарҙы атаған һүҙҙәр башҡорт телендә байтаҡ. Төп һүҙ булып *белемсе* һүҙе тора. Был һүҙ бағымсы, имсе, күрәҙәсе, сихырсы, белем йә ғилем эйәһе, белгес мәғәнәләрендә башҡорт теле һүҙлектәрендә сағылыш тапҡан. *Белемсе* һүҙенән тыш диалекттарҙа шул уҡ мәғәнәләрҙә *белекле, белексе, белеүсе* терминдары осрай, фольклор әҫәрҙәрендә *белемсе әбей, белексе ҡарт, белекле ҡортҡа* кеүек атамалар ҙа урын алған. Был атамаларҙа осраған *белемсе* һүҙе һәм уның диалект варианттары *бел-, белеү* тамырына барып тоташа. Был тамыр бик боронғо дөйөм төрки тамырҙарҙың береһе. Ул шул уҡ мәғәнәлә бөтә төрки телдәрендә *bel, bil, byl, pel* фонетик варианттарҙа осрай (СИГТЯ, 2006, 838). Ҡомартҡыларға килгәндә инде *bil* тамырлы *bilgä, bilig, bilin, biliš, bilinčäk* кеүек һүҙҙәр аң, белем, төшөнөү, таныу,

ғилем, тәрән аҡыл мәғәнәләрендә уларҙа ла сағылыш тапкан. Ошоларҙан сығып *белемселәр* персонаждарының төп билдәһе белемгә бәйле, тик ул белемдең ышаныуҙар буйынса ябай, ғәҙәти түгел, ә мөғжизәле, серле, хатта илаһи сфера менән бәйле булыуы күренә. Башҡорт ышаныуҙары буйынса, был төркөмгә ҡараған мифлаштырылған персонаждар кешенең, донъяның киләсәген, яҙмышын юрай белгән; юғалған әйберҙе, малды, кешене таба алған; ауырыу-сырхау, хәүеф-хәтәр ебәрә алған, шул уҡ ваҡытта, кәрәк саҡта сир-сорҙо дауалай, хәүеф-хәтәрҙе ҡыуа, бөтөрә алған. Белемселәрҙең ошондай ғәҙәти булмаған һәләте, мөғжизәле белеме, ышаныуҙар буйынса, йә нәҫелдән, йә ниндәйҙер стресс арҡаһында барлыҡҡа килә. Әммә нисек кенә булмаһын, ғәҙәти булмаған белем, һәләт асылғансы буласаҡ белемсе ауырый, төрлө хәүеф-хәтәргә тарый. Мәҫәлән, күрәҙәселәрҙең һөйләүе буйынса, уларҙың һәләте ҡойон алып киткәндән, оҙаҡ ятып ауырыуҙан, мәрткә барып ҡайтыуҙан, яңғыҙ балаһы үлгәндән, бөтә донъяһы, ғаиләһе менән янып, бер үҙе генә тере ҡалғандан һуң асылған (Экспед…, 1986–1995; 1999–2010). Ҡайһы бер белемселәр тураһында замандаштары: «Уны мосолман пәрейҙәре алып китеп Ҡаф тауы артында уҡытҡан икән», – тиҙәр (Шәмиғолова, 1908, Өфө). Икенсе бер белемсе тураһында Йылайыр районында ошондай мәғлүмәт бирҙеләр: «Белемсе Мәхлән суфый Ярлыҡапов атайымдың ағаһы. Мин уны олатай, тип йөрөттөм. Ул Ҡарауанһарайҙа мәҙрәсә тамамлаған, яҡшы уҡыған. Шуға уҡытыусы хәҙрәттәре уға үҙенең таяғын бүләк итеп биргән. Ул мин тыумаҫ борон уҡ минең яҙмышты әйткән. Аҙаҡ минең тыуасаҡ балаларымдың яҙмышын белеп ултырҙы. Олатайым килгән кешеләрҙе дауалай торғайны. Малдарҙы дауаланы, йылан арбаны. Бер кешене йылан саҡҡайны, шул йыланды олатайым саҡырҙы. Йылан беҙҙең тупһаға килеп эсе ярылып үлде. Ә теге йылан саҡкан кеше һауыҡты... Хәҙерге заман кешеләре төш юрай белмәҫ, мин үлһәм, төшөңдө шулай юраРһың: төшөңә күршең Сабирйән керһә – Хоҙай сабыр бул, тиер, Һөйөндөк ағайыңды күрһәң – һөйөнөрһөң, Ҡыуандыҡ ағайыңды күрһәң – ҡыуанырһың. Төш һөйләр кешең булмаһа – аҡкан һыуға һөйлә, һыу һинең төшөңдө юрар», – тине (Йылайыр ф., 2006, 224–225). Үрҙә килтерелгәндәрҙән сығып, башҡорт мифологияһының белемселәре ябай кешенән айырмалы рәүештә ғәҙәти булмаған, мөғжизәле белемгә эйә, тип әйтеп була. Ул белемде, һәләтте һәр белемсе үҙенсә, төрлө ситуацияла ҡабул иткән. Кемгәлер уны мосолман пәрейҙәре, кемгәлер хәҙрәттәр, кемгәлер әүлиәләр, кемгәлер яуыз көстәр тапшырған. Шул сәбәпле белемселәр ҙә төрлө булған. Кемдер яҡшылыҡ, кемдер кешегә яуызлыҡ ҡылған. Шуға ла башҡорттар белемселәргә йөрөһә лә, мөрәжәғәт итһә лә, барыбер уларҙан ҡурҡҡан. Хатта халыҡта ошондай мәҡәлдәр ҙә барлыҡҡа килгән. Сағ.: *Белемсегә* барма, башыңа ҡайғы алма. *Бағыусыға* барған, башына бәлә алған. Был ике мәҡәлдә лә шул уҡ *белемсе* тураһында һүҙ бара, сөнки *бағымсылар* белемселәрҙең бер төрөн тәшкил итә.

Функциональ күҙлектән бөтә белемселәрҙе 4 төркөмгә бүлеп ҡарарға була: *имселәр, күрәҙәселәр, сихырсылар, норманан артыҡ уңышлы, белемле, һәләтле оҫталар.*

Был мәҡәләлә мин тик *имселәр* төркөмөнә, улар менән бәйле лексикаға ғына туҡталмаҡсымын. *Имселәр* төркөмөнә *имсе*, унан яһалған *им-томсо, им-йомсо, имсе ҡарсыҡ, имсе ҡарт, имсе ҡортҡа, им итеүсе, имләүсе әбей, имнәүще, имсе-йомсо* атамаларын йөрөткән магик, дауалау белгесен, белемсеһен индерергә була. Башҡорт һөйләштәрендә *имсе* һүҙенә төрлө ырымдар, өшкөрөүҙәр, имдәр, үләндәр һ.б. саралар менән дауалаусы тигән аңлатма бирелгән. Башҡорттарҙың им-том китабынан имселәрҙең үҙенә күрә махсуслашыуын да күреп була. Әйтәйек, йөрәк ауырыуын – *һапылдатыусы*, башты – *мейе ултыртыусы*, бил ауыртҡанды – *һылаусы*, аяҡ-ҡул, иңбаш тайыуын – *һөйәк ултыртыусы*, быуманы *осоҡсо* имләүен күреп була. Әммә, дөйөм алғанда, башҡорттарҙа имләү менән ғәҙәттә имсе әбейҙәр, бабайҙар, муллалар, кендек инәләре шөғөлләнгән. *Имсе* һүҙенең нигеҙендә *им* лексемаһы ята. *Им* һүҙенең һөйләштәрҙә ауырыуға ҡаршы ҡулланылған сара, дауа, дарыу, ырым тигән мәғәнәләре бирелгән. Был тамырҙан *имсенән* тыш *им табыу, им ташы, им-том, им-жом, им итеү, имләү, имләү көнө, имләүес* кеүек мөғжизәле дауалау саралары, ысулдары менән бәйле һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, компазиттар барлыҡҡа килгән.

*Им* һүҙе төрлө фонетик варианттарҙа һәм шул уҡ мәғәнәләрҙә башҡа төрки телдәрендә лә киң таралыш алған (ЭСТЯ, 1974, 270-271; Функ, 2005, 78). Хәҙерге төрки телдәрендә һәм боронғо яҙма ҡомартҡыларҙа *em/äm/im* тамырлы бик күп һүҙҙәр ҙә сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларҙа *emči* 'имсе', *emlä* 'имлә', *emžü* 'имсе', *otači emči* 'үлән имсеһе', *em jürüntäk* 'им сараһы, дарыу', *em-sem* 'дарыу', *em-su jürüntäk* 'дарыу-дарман', *ot em* 'дауа үләне', *otačï-emči* 'имсе, дауалаусы' һ.б. халыҡ медицинаһы терминдары сағылыш тапҡан (ДТС, 1969, 171-172, 373).

Хәҙерге төрки телдәрҙә лә *em/im/äm* тамырлы һүҙҙәр бик күп. Түбәндә ҡайһы бер төрки телдәрҙән миҫалдар килтерелә. Сағ.: ҡырғыҙ телендә *эмчи* 'имсе, дауалаусы', *эмчи-домчу* 'имсе, балалар имсеһе', *эмчил* 'магик дауалауға ышаныусан' мәғәнәһендә; татар телендә – *им* 'ырым, им-том, дауа, шифа, дарыу, әмәл, сара', *имләвеч* 'им-томда файҙаланылған әйбер', *имләү* 'төрлө һүҙ, әпсендәр менән кешене дауалау, йә киреһенсә боҙоу'; *им-том* 'ауырыуға ҡаршы ҡулланылған саралар, дарыу', *имче* 'имсе'; сыуаш телендә – *им* 'йүнәлтеү, дауа, дарыу (төнәтмә формаһында)', *им-ям/им-юм* 'төнәтмә, дарыу', *им-çам/им-çум* 'дарыу, дауалау сараһы', *имле* 'имләү', *имле-юмла* 'магик имләү', *имле* 'шифалы', *имле-сипле* 'шифалы', *имлех-сиплех* 'шифалы сара', *имсер-йомсар* 'тарҡаулыҡ, буталсыҡ', *имсерлен* 'ауырыу, сирләү' һ.б. (Юдахин, 1965, 950-953; ТТАС, 2005, 183-185; Федотов, 1996 (1), 166-167).

Төрки телдәренән тыш *et/it/ät* тамыры менән һүҙҙәр монголда – *em* ‘дарыу’; эвенкта – *эмтэ* ‘дауалау, имләү’; мариҙа – *эм* ‘дарыу’, *эмлаш* ‘дауалау, йүнәлтеү’; удмуртта – *эмьюм* ‘дарыу’ мәғәнәһендә сағылыш тапҡан. Үрҙә килтергәндәр башҡорт телендәге *им, имләү, имсе* һүҙҙәренең бик боронғо осорға барып тоташыуын күрһәтә. *Им* тамыры төрки телдәрендә генә түгел, монгол, тунгус-маньчжур, фин-уғыр телдәрендә лә осрай. Лексик материал үҙ йәһәтендә башҡорт мифологияһындағы *имселәр* төркөмөн бик боронғо осорҙарға алып барып бәйләй.

Функциональ күҙлектән *имселәр* борон-борондан кешене төрлө магик саралар ярҙамында дауалау, им-том итеү менән булышҡан. Улар тик им-том иткән, күрәҙәлек менән фал һалыу, ноҡот йә башҡа юрау, ырымлауҙар менән ғәҙәттә шөғөлләнмәгән. Үрҙә күрһәтелгәнсә, *имселәр* башҡорт мифологияһында төрлө им-том менән булышҡан. Әммә араларында махсуслашыу ҙа күҙәтелгән. Халыҡ араһында *осоҡсолар, арбаусылар, өшкөрөүселәр, һапылдатыусылар, һөйәк ултыртыусылар* булған. Түбәндә уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталмаҡсымын.

Магик дауалау, им итеү менән башҡорт мифологияһында *осоҡсо* персонажы бәйле. Мифологик һүҙлектә *осоҡсо* термины түбәндәгесә аңлатыла: ҡурсаҡ, тауыҡ, йәки башҡа әйбер, предмет ярҙамында ауырыу эйәһен ҡыуып йүнәлтеү. *Осоҡсо* һүҙенән тыш башҡорт телендә *осоҡлаусы, осоҡ һалыусы/осоҡ ташлаусы, осоҡсо ҡарсыҡ, осоҡсо әбей* кеүек терминдар бар. Бөтә үрҙә килтерелгән һүҙҙәр нигеҙендә *осоҡ* лексемаһы ята. *Осоҡ* башҡорт мифологияһында яуыз сир эйәһе. Кешегә ул «яман урындарҙан», йәғни мәйет һыуы түккән, мал һуйған, боҙом ташланған, ете юл сатынан эйәрә, тиҙәр. Әгәр кеше ошондай урындарҙа йығылһа, ултырһа, ятһа, унан берәй әйбер алһа, ауырып китеүе ихтимал. Әйтергә кәрәк, *осоҡ* һүҙе менән башҡорттарҙың төрлө этно-территориаль төркөмдәре төрлө ауырыуҙарҙы атай. Мәҫәлән, әбйәлилдәр – быуманы, бөрйәндәр – ҡысынманы, ҡариҙелдәр ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын атайҙар. Хатта түлһеҙлекте, ирен-тел ҡутырлауын да *осоҡ* менән бәйләй башҡорт. *Осоҡтан* килгән ауырыуҙы, халыҡ ышаныуҙары буйынса, тик *осоҡлау* ысулы менән генә бөтөрөп була. *Осоҡлау* ысулдары ла күп була. Мәҫәлән, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары 1 йә 2 ҡурсаҡ эшләп, сирле кеше ҡуйынына 2-3 көнгә һалып, шунан алып барып ташлайҙар. Түлһеҙ, бала тапмаған ҡатынды яңы ғына һуйылған мал эсәге менән бәргесләйҙәр. Шунан ҡатындың күлдәген, бысраҡ эсәктәрҙе осоҡ ташлау урынына, соҡорға алып барып ташлайҙар. Бәғзе яҡ башҡорттары сирләгән кешене тере йә әле генә һуйылған ҡара тауыҡ менән һуҡҡылап, уның башынан, биленән 3 тапҡыр уратып алып соҡорға ташлайҙар (Хисамитдинова, 2015, 288-289). Шулай итеп *осоҡ* һүҙе менән башҡорттар ауырыу эйәһен, ауырыу ҡыуылған тауыҡты, ҡурсаҡты һ.б. предметтарҙы атай.

*Осоҡ* термины менән башҡорт теленең *осоноу* ‘аҙған сир’, *осан* ‘эс төшөү’, *ошан* ‘рахит’ кеүек лексемалары ла бер тамырҙан булыуы ихтимал, сөнки бөтә

килтерелгән һүҙҙәр *осоҡ* кеүек үк ауырыу, уны магик ысул менән дауалау, имләү мәғәнәһенә эйә.

*Осоҡ* һүҙенең хәҙерге һәм боронғо төрки телдәрҙә параллелдәре байтаҡ. Мәҫәлән, тик бер генә ирен боҙолоу, ауыҙға бөрсөк-бөрсөк сабыртма сығыу мәғәнәһендә генә төрк., төр., гаг., үз., уйғ. телдәрендә – *učuq*; әз. – *učuγ*; ҡаҙ., нуғ., ҡкал. – *ušïq* лексемаһы йөрөй. Башҡа төрки телдәрҙә лә был терминдан яһалған атамалар осрай. Мәҫәлән, ҡырғыҙ телендә үпкә ауырыуын – *курчак учук*, шешек төрөн – *кайры учук*; төркмәндә ҡорбан малын – *учук*; теленгитта шаманды, ҡамды *учукчу* тип атайҙар. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа ла *učïq, učyuq, učuq jelpik* ʻирен сабыртмаһы, тапмаʼ атамалары булараҡ сағылыш тапҡан (ДТС, 1969, 604; ЭСТЯ, 1974, 616; Трад. миров., 1988, 108).

Боронғо *učuq/ušïq/učuγ* лексемаһының барлыҡҡа килеүе тураһында фәндә бер нисә ҡараш бар. Э.В. Севортян, Э.Р. Тенишев, Р.Ғ. Әхмәтьянов һ.б. ҡайһы бер телселәр *učuq/ušïq/učuγ* лексемаһының килеп сығышын ʻосоу, осоп, ҡалҡып сығыуʼ мәғәнәһендәге *uč* тамыры менән бәйләй. К. Менгес нимәнеңдер осо, сиге, башы, ахыры мәғәнәһендә йөрөгән *uč* тамырына бәйләй (ЭСТЯ, 1974, 616; Әхмәтьянов, 2015 (2), 82-83). Минең ҡарамаҡҡа, *ос* лексемаһының ʻосоу, осоп килеп сығыу, осоп килеп һуғылыу (ҡағылыу, тейеү)ʼ, ә боронғо ҡомартҡыларҙағы ʻүлеүʼ мәғәнәһе мифлаштырылған *осоҡ, осоноу, осан* кеүек һүҙҙәр мәғәнәһенә яҡын.

Башҡорт мифологияһының имселәр төркөмөнә *арбаусыларҙы* индереп була. *Арбаусы* һүҙенә һүҙлектәрҙә күрәҙәсе, сихырсы, тылсымлы һүҙ, доға менән дауалаусы тигән аңлатма бирелгән. Шулай итеп был аңлатманан беҙ арбаусының киң профилле магик белгес икәнен күрәбеҙ. Ул дауалай, күрәҙәлек ҡыла, иң мөһиме, магик һүҙҙәр ярҙамында кешене, башҡа йән эйәләрен үҙенә буйһондора, сихырлай. Әммә, сихырсыларҙан айырмалы рәүештә, арбаусы ҙур зыян килтермәй, боҙмай, ул алдай, кешенең «күҙен бәйләй». Ышаныуҙар буйынса, арбаусылар боронғо мәҙрәсәләрҙә, әүлиәләрҙә белем алған. Ул белемде арбаусы кешегә һөйләргә тейеш булмаған, ә арбау процедураһы ныҡ йәшерелгән. Арбау һүҙҙәре 3-7 тапҡыр шыбырлап ҡына әйтелгән. Кешегә доғаларҙы әйтеү тыйылған. Шуға хатта арбаусыларҙың яҡындары, балалары ла белмәй арбау серҙәрен. Сағ.: Атайым бик уҡымышлы мулла кеше ине. Ул өшкөрөп, им-том итеп күп кешеләргә ярҙам итте. Иҫемдә ҡалған миңә 5-6 йәштәрҙә булған бер хәл. Атайыма бер кис колхоз бригадиры өйөр айғырын етәкләп килде. Ул айғырҙы йылан саҡҡан икән. Шул айғырҙы атайым арбап ҡотҡарҙы. Ә иртәнсәк беҙҙең кәртә эсенә бик күп йылан йыйылғайны. Шунан атайым үҙенең мулла таяғы менән йыландарға һелтәп ебәрҙе. Һелтәгәйне, улар ырғып китте төрлө яҡҡа. Шулай итеп атайым солан ишегенән артҡы ҡапҡаға тиклем юл һалды. Юл һалғас, таяғын артына ҡуйҙы ла урман яғына китте. Теге йыландар сиратҡа баҫҡан һымаҡ теҙелешеп атайымдың артынан эйәрҙеләр.

Йыландар бик оҙаҡ ҡына теҙелеште. Атайым күҙҙән юғалды, ә улар һаман китеп бөтмәгәйнеләр әле. Атайым кискә табан ғына ҡайтып инде. Беҙ: «Нишләп оҙаҡ йөрөнөң?» – тип һораныҡ атайымдан. Ул: «Йыландарҙың һәр бер семьяһын өйҙәренә таратып йөрөнөм», – тине. Шунан атайым өйөр айғырын йыландар батшаһы сағыуы тураһында һөйләне. Йыландар батшаһы атайым арбағас, эсе ярылып үлгән. Шуға урмандағы бөтә йыландар ҙа беҙҙең өйгә килгән икән. Әгәр атайым көслө мулла, яҡшы йылан арбаусы булмаһа, йыландар беҙҙе вис ашап бөтөр ине. Өйөр айғырын саҡҡан йыланды арбағанда атайым әллә ниндәй доғалар уҡый ине. Мин аны иҫләмәйем. Ике ағайым бар, исмаһам береһенә әйтеп ҡалдырмаған шул... (Илһамова, 1946).

Ысынлап та, йылан арбау серен халыҡтан йыйыуы бик ҡыйын. Шуға арбаусыларҙың йылан теле, йылан арбау серҙәре, магик һүҙҙәре бик әҙ һаҡланған. Ә йылан арбаусылар башҡортта юҡ кимәлендә. Башҡорттарҙа йылан арбауҙан тыш *эт арбау, теш ҡортон арбау, бал ҡортон арбау, күҙ угын арбау, тел-теш ҡаяуын арбау, ҡаргыш ҡаяуын, гәйбәт ҡаяуын арбау* осрай. Ышаныуҙар буйынса, һәр кемдең, шул йәһәттән хайуандарҙың күҙендә, телендә яман *уҡ* һәм *ҡаяу* була икән. Шул *уҡ, ҡаяу* килеп ҡаҙалһа, кеше, мал ауырый икән. Бындай ауырыуҙарҙы махсус арбау доғаларын, икенсе төрлө телен белгән арбаусылар ғына бөтөрә алған. Ышаныуҙар буйынса, арбаусылар йылан, ҡорт, кеше күҙе, теле, теше ҡаяуын, ҡортон еңер өсөн уларҙың телен белергә тейеш булған. Бының өсөн улар тау аҫты мәҙрәсәләрендә әүлиәләрҙә, сихырсыларҙа белем алған. Шуның өсөн һәр кем арбаусы була алмаған. Ысынлап та, фольклор материалдары күрһәтеүенсә, им-том менән күп кенә әбейҙәр, бабайҙар, муллалар шөғөлләнгән. Әммә арбау менән ғәҙәттә, үрҙә күрһәтелгәнсә, бик уҡымышлы, мәҙрәсәләр бөткән бабайҙар ғына булышҡан.

*Арбаусы* термины, унан яһалған *йылан арбаусы, ҡорт арбаусы* атамалары *арбау* һүҙенә барып тоташа. *Арбау* һүҙе шул уҡ, йәки яҡын мәғәнәлә күп кенә төрки телдәрендә, боронғо яҙма ҡомартҡыларҙа сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, *arba* лексемаһы башҡорт телендәге *арбау* һымаҡ 'сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп үҙеңә буйһондороу, ҡаратыу, аҡыл, күңелен биләү, әүрәтеү' мәғәнәһендә ҡаҙ., ҡыр., ҡкал., тат., уйғ., хаҡ. ДТС-та осрай. Яҡут телендә был һүҙ ҡорбан малына кемдеңдер сирен индереүҙе, алтай диалекттарында – әпсенләү, күрәҙәлек итеү, ҡаҙаҡ телендә – сихырлау мәғәнәләрендә осрай. Шор һәм телеуттарҙа арбау һүҙенән барлыҡҡа килгән *арбашчы* термины ҡам һәм сихырсыны аңлата (ЭСТЯ, 1974, 169; КРС, 1988, 37; Юдахин, 1995, 65 һ.б.). *Arba* 'арбау' лексемаһының барлыҡҡа килеүе тураһында фәндә бер нисә ҡараш бар. Э.В. Севортян был лексеманы тылсым, сихыр мәғәнәһендә ҡулланылған монгол телдәрендәге *ap/ab/ar* тамыры менән бәйләй. Уның фекеренсә, тәүҙә *apra/abra*, аҙаҡ метатеза һөҙөмтәһендә арбау мәғәнәһендәге *arpa/arba* лексемаһы барлыҡҡа килгән (ЭСТЯ, 1974, 169).

Билдәле тюркологтар В. Банг һәм А. фон Габен *arba* лексемаһын санскрит телендәге *avici* һүҙенә бәйләйҙәр. Икенсе бер хеҙмәтендә В. Банг *arba* лексемаһын төрки телдәренең 'алдау, ҡыҙыҡһындырып эйәртеү' мәғәнәһендә ҡулланылған *ar-* тамырына тоҫҡай. Билдәле тюркологтар Д. Немет менән М. Рясянен төрки телдәренең *apba* һүҙен фин телендәге *arpa* 'күрәҙәлек инструменты, бағымсылау предметтары; яҙмыш, йәрәбә', венгерҙағы *orvoš* 'врач, табип' менән сағыштырып, күрһәтелгән ике һүҙҙең дә төрки сығанаҡлы *arba*ға барып тоташҡанын иҫбатлайҙар (ЭСТЯ, 1974, 169-170).

Үрҙә килтерелгән миҫалдар башҡорт теленең тағы бер һүҙенә иғтибар итергә мәжбүр итә. Был күҙгә сыҡҡан *арпа* тураһында бара. Күҙҙәге арпа ауырыуын, ышаныуҙар буйынса, һары сәсле бәләкәй генә әбей – арпа эйәһе ебәрә икән. Ул әбейҙең күҙ уғы килеп ҡаҙалһа, кеше ауырый. Һәм иң ҡыҙығы шунда, был ауырыуҙы ла арбау, махсус арбау предметтары менән төрткөләп бөтөрөп була икән. Шулай итеп ауырыуҙың сәбәбе, имләү ысулдары арбауға барып тоташа. Ошоларҙан сығып был ике һүҙ, йәғни башҡорт телендәге арбау һәм арпа һүҙҙәре, бер үк төрки сығанаҡлы *arba/arpa/arva* лексемаһына барып тоташа тип әйтергә була.

Имселәр төркөмөнә *өшкөрөүселәрҙе* лә индереп була. *Өшкөрөүсе* тип ғәҙәттә доғалар белгән, уҡымышлы им-томсоно атайҙар. Улар төрлө доғалар, сихри һүҙҙәр әйтеп ауырыған кешенең үҙен имләйҙәр, йә ауырыуға шифа булырлыҡ берәй нәмәне имләп бирәләр. Мәҫәлән, өшкөртөлгән тоҙ киң ҡулланылған. Күп осраҡта өшкөрөүселәр муллалар, хәҙрәттәр була. Сағ.: Шаһим мулла: «Ярай, улай булғас, өшкөрәйем. Иншалла, сихәте булыр», – тип ниҙер уҡынып, минең йөҙгә өрә башланы (Ҡ. Даян).

Өшкөрөүселәр мулла булһа ла мосолман доғаларын ғына ҡулланмағандар. Сағ.: Өшкөрөүсе әбей килеп баламды өшкөрөп китте. Кисен тауыҡ һуйып, мәзин өшкөрөп ҡуйҙы. Иҫке кейем кейҙереп, тауыҡ менән һуҡҡылап та өшкөрҙө мулла (Йылайыр ф., 2006, 139).

Әйтергә кәрәк, башҡорттарҙа өшкөрөү менән тик муллалар ғына шөғөлләнмәгән. Ғаиләнең оло ағзаһы, ауылдың оло әбейе, бабайы ла өшкөрөүсе булған, өшкөрөү менән кәрәк саҡта булышҡан. Сағ.: …Мин бәләкәй саҡта, 1928 йылда, мине ен алып китеп юл буйына ташлап киткән. Шунан мин бик ауырығанмын. Ҡартатай мине өшкөргән. Йығылған ерҙе барып өшкөрөп, күмеп килгән. Арбала ҡалған әйберемде өшкөрөп күмгән, шунан терелеп киткәнмен (Яңауыл ф., 2009, 165).

Башҡорт телендә *өшкөрөүсе* һүҙе менән бергә *өшкөрөүсе бабай (әбей, ҡарт)* кеүек терминдар ҙа сағылыш тапҡан. Был терминдар бөтәһе лә *өшкөрөү* һүҙенә барып тоташа. Был һүҙҙән *өшкөртөлгән, өшкөрөлгән, өшкөрөмләнгән*, йәғни 'доға, сихри һүҙҙәр менән имләнгән'; *өшкөрөм-төкөрөм* 'һәр төрлө им-том', *өшкөрөү*

'доға уҡып, сихри һүҙҙәр әйтеп, өрөп имләү'; *өшкөртөлгән* 'доға, сихри һүҙҙәр менән имләнгән' кеүек магик дауалау менән бәйле лексемалар барлыҡҡа килгән. Үрҙә килтерелгән һүҙҙәр өшкөрөү ҡылымына барып тоташа. *Өшкөрөү* һүҙе башҡорт телендә бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла: доға уҡый-уҡый өрөп имләү (ауырыуҙың үҙен йәки дауа-дарман иткән берәй нәмәне); урлау, сәлдереү, ҡурҡыу, шөрләү, ҡурҡытыу, хәүефләндереү, малды ҡыуып индереү һ.б. Башҡорт телендәге *өшкөрөү* һәм *өшкөрөүсе* һүҙҙәренең башҡа төрки телдәрҙә параллелдәре бар. Мәҫәлән, татар телендә *өшкерү*, *өшкерүче* шул уҡ 'өшкөрөү, өшкөрөүсе' мәғәнәһендә, нуғайҙа – *üskir* 'ауыҙ эсенән уҡыныу, һыҙғырыу', уйғыр, төркмән, алтайҙа – *üškür* 'ауыр тын алыу'; ҡырғыҙҙа – *üškür* 'ауыр тын алыу, һыҙғырған кеүек тауыш сығарыу'; хакаста – *üskür* 'имләү процедураһында күҙгә өрөү', *üsküriγči* 'күҙ табибы'; яҡутта – *üsü:r* 'өрөү, һыҙғырыу' һ.б. (ЭСТЯ, 1974, 645; Бутанаев, 1999, 168; Юдахин, 1965, 827). *Üškür/üšγür* лексемаһы 'ышылдау, һөскөртөү, һыҙғырыу' мәғәнәләрендә боронғо төрки ҡомартҡыларҙа ла осрай (ДТС, 1969, 628).

Э.В. Севортян *üškür/üšγür* лексемаһының барлыҡҡа килеүен өноҡшаш *üš* тамыры менән бәйләй. Дөйөм алғанда, был ҡарашты күп кенә ғалимдар яҡлай. Шуға башҡорт теленең *өшкөрөү*, *өшкөрөүсе* кеүек һүҙҙәре күп кенә төрки телдәре менән уртаҡ һәм тел байлығының бик боронғо ҡатламдарына барып тоташа, тип әйтә алабыҙ. Был һүҙҙәрҙең тамыры бик боронғо төрки телдәрҙән айырылған яҡут телендә лә булыуы уның боронғолоғон иҫбатлай. Ә инде өшкөрөүсе атҡарған дауалау йолаһына килгәндә инде, уның да ҡамлыҡ, шаманлыҡ осоро менән бәйле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға була. Үрҙә күрһәтелгәнсә, өшкөрөүсе бик боронғо ҡара доғаларҙы, мосолман доғаларын, башҡа им-том итеү сараларын ҡулланған. Былар бөтәһе лә уның боронғолоғон иҫбатлай кеүек.

Мифлаштырылған персонаждарҙың имселәр төркөмөнә *баҡсы/бағымсыларҙы* ла индереп була. Әммә башҡорт мифологияһының был төркөмө, башҡа персонаждарҙан айырмалы рәүештә, тик имләү, им-том итеү менән генә шөғөлләнмәй. Улар күрәҙәлек итеү, ырым-юрау, фал һалыу, башҡа серле функцияларҙы ла үтәгән. Боронғо терминология менән әйткәндә, башҡорт баҡсылары/бағымсылары киң профилле магик белгестәр булып тора. Шуғалыр бағымсылар кешене, малды имләгән; яҙмышты, киләсәкте күҙаллаған, юғалған әйберҙәрҙе, мал-тыуарҙы, кешене таба алған, тәбиғәт күренештәренә йоғонто яһай алған (мәҫәлән, ямғыр яуҙырған йә туҡтатҡан); кешегә, халыҡҡа мул уңыш, түллек тәьмин иткән. Был мәҡәләлә мин киң профилле дауалау, им-том итеү сфераһына күберәк туҡталмаҡсымын.

Башҡорт донъяһының һәр тарафында билдәле баҡсы/бағымсылары булған. Улар һәр ерҙә тиерлек ҡурҡыуҙы, урта ҡолаҡ шешеүен, күҙҙәге арпаны, өсйәнде, ҡыҙылсаны һ.б. ауырыуҙарҙы төрлө ысулдар менән имләгән. Сағ.: Бағымсы балаға күҙ тейһә, ыҫлай торғайны. Ул ете төрлө әйбер: артыш, дары, шырпы

көкөртө, баланың ата-әсәһенең елкә сәсе, күмер, еп киҫәге, эт йәки бесәй йөнө ала торғайны. Шунан ҡояш байып барғанда һоҫҡоға утлы күмер алып, шуға әҙләп кенә сәс, йөн, көкөрт, артышты һ.б. һала-һала, бала янында ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, әйләнеп йөрөй торғайны:

Һыуҙың ағышына кит,
Көндөң байышына кит,
Йомшаҡ түшәктәргә кит,
Йомшаҡ яҫтыҡтарға кит.
Ҡорайт, мәлеғөн,
Ҡорайт, мәлеғөн,
Ҡайт, үҙеңә ҡайт!
(Ф. Асҡарова).

Күҙ тейеүҙе имләгән бағымсыларҙың ҡот ҡайтарыу менән бәйле тағы бер арбау текстын килтерергә була.

Эй һин, ҡотом, һин ҡотом,
Саҡырғанда кил, ҡотом.
Хәстә төштө башыма,
Эйәһен табып бир, ҡотом.
Ҡотом әмере буйынса,
Ҡорҡот әмере буйынса,
Ҡарымҡот атай, ҡотоң бир,
Ҡотом ҡайҙа, мин шунда.
Кил, ҡотом, кил, ҡотом,
Күгәрсендәй гөрләп кил,
Ҡыр ҡаҙындай теҙелеп кил,
Аҡ йыландай һуҙылып кил.
(БИТК, 2006, 44).

Килтерелгән текст баҡсының төрлө рухтарға, билдәле әүлиәләргә мөрәжәғәт итеүен күрһәтә. Был инде баҡсы/бағымсыларҙың кешеләр һәм рухтар, кешеләр һәм фәрештәләр, кешеләр һәм эйәләр араһында аралашсы функцияһын үтәүен дәлилләй. Улар олатай-бабаларҙы, әрүахтарҙы саҡырып, уларҙан им-том итеүҙә, күрәҙәлек итеүҙә ярҙам алырға тырышҡан.

*Бағымсы* күп профилле белемсе булараҡ бик күп алымдар, саралар менән им-том иткән. Ул ҡот та ҡойған, арбаған да, әпсен дә, доға ла, ҡыуыу, ҡурҡытыу һ.б. им-том ҡулланған. Бағымсы арсеналында *бағымдыҡ әйтеү* айырым бер урын алып торған. *Бағымдыҡ* – ул бағымсы тарафынан ҡулланылған һамаҡ. Түбәндә балаһы оҙаҡ булмаған ҡатынды магик дауалау процедураһы менән бәйле *бағымдыҡ* килтерелә. Был бағымдыҡты бағымсы туғыҙ айға тиң булһын тип, туғыҙ мәртәбә әйтә:

Мин һалдым маяу!
Мин әйтәм баяу!
Һыбаға әмәл таяу!
Кендеккә тығып ҡаяу!
Ҡотҡа – ҡот!
Йәнгә – йән!
Баҡ, баҡ!
Бәпәй килмәй бик оҙаҡ!
Баҡ, баҡ!
Итермен һине ҡунаҡ!
Баҡ, баҡ, мәмәй көт бер табаҡ!
Баҡ, баҡ!
Туғыҙ ай инде арыҡ!
Баҡ, баҡ!
Ҡайғы-илау бик зарыҡ!
Баҡ, баҡ!
Тәңрем, һиңә бер һарыҡ!
Баҡ, баҡ!
Өмөттө ҡыйма, зинһар!
Баҡ, баҡ!
Күрһәтмә беҙгә моң-зар!
Баҡ, баҡ!
Һәмгелсәктә кем йоҡлар!

Бағымсы ошо бағымды 9 тапҡыр әйтеп ҡатынды йыуындырғас, доға уҡый, бармаҡ менән үҙенең, күп бала тапҡан әсәнең һәм бағылған йәш ҡатындың кендегенә төртә, ыуыҙ һөтө алып имсәктәрен ыуалай, ҡурсаҡ эшләп, тағы доға уҡып, кендек аҫтына һала, туғыҙ һаны магияһына мөрәжәғәт итә (М. Ғиззәтуллина).

Үрҙәге миҫал күрһәтеүенсә, бағымсы бағымдыҡ һәм башҡа саралар ярҙамында йәш ҡатынға түл тарта, ҡотон ҡуҙғалта. Шулай итеп, *бағымсы/баҡсылар* башҡорт тормошонда улар бик ҙур роль уйнаған, ауырыуҙы терелткән, балаһыҙға бала, бәхетһеҙгә ҡот, сирлегә һаулыҡ биргән.

Башҡорт теләндә *бағымсы, баҡсы* терминдарынан тыш *бағыусы, бағым, бағыу, бағымлыҡ/бағымдыҡ, бағымсылау*, фольклорҙа, әҙәбиәттә *бағымсы әбей, бағымсы ҡарсыҡ, баҡсы бабай* кеүек һүҙҙәр сағылыш тапҡан. Сағ.: 1. Бәләкәй сағында әсәһе уны [Гөлбаныуҙы] *бағымсыға* ла алып барып ҡараны (Т. Ғарипова). 2. Юрау өсөн Тамъян иленә ҡайҙандыр Сулман яғынан килеп аҙашып тороп ҡалған *бағымсы ҡарсыҡ* саҡырылды (К. Мәргән).

*Бағымсы, баҡсы* һ.б. үрҙә килтерелгән һүҙҙәр нигеҙендә *бағ/баҡ* тамыры ята. *Баҡ/бағ* тамырының башҡорт һүҙлектәрендә ҡарау, күҙәтеү, көтөү, тәрбиәләү,

буйһоноу, им-том итеү, күрәҙәлек итеү мәғәнәләре сағылыш тапҡан. Әйтеп китергә кәрәк, *багымсы, баҡсы* терминдарының варианттары башҡа төрки телдәрендә лә осрай. Мәҫәлән, нуғай телендә ҡам, күрәҙә, сакраль белемгә эйә кеше, музыкаль инструменттар, йыр ярҙамында, шулай уҡ көҙгө, бысаҡ, ҡамсы, сөй, хайуан һөйәге ярҙамында им итеүсе мәғәнәһендә *бакшы/баксы* һүҙе йөрөй. Ҡаҙаҡта – им-томсо, күрәҙә мәғәнәһендә *баҡшы, баҡшы-кемпир*; яҡутта – *кытат бахсы* һүҙе тимерселәр эйәһе/атаһы; хакаста – *пахсы* (пахыс) – баҡсы, уҡымышлы, хәйләкәр кеше; сыуашта – *ял пахи* – бер тәңреләренең исеме булып йөрөүе билдәле. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа *baqšï* ‘уҡытыусы, остаз’, *otačï-baqšï* ‘дауалаусы, имләүсе’ мәғәнәһендә осрай (Юдахин, 1965, 101; ТТАС, 2005, 65; Капаев, 2012, 110-112; ДТС, 1969, 81-82; Трад. миров., 1988, 111).

Төрки телдәренең *baqsï/baqšï/pahšï* лексемаһының барлыҡҡа килеүенә фәндә бер нисә ҡараш бар. Боронғо төрки һүҙлеген төҙөүселәр был лексеманы ҡытай телендәге *боши* (baq-šï) ‘остаз, уҡытыусы’, К.К. Юдахин санскриттағы *bхик-шу* ‘эйә, рух’, күп кенә ғалимдар *baqsï/baqšï/pahsï* лексемаһын дөйөм төрки *baq/baγ/paq* тамырына тоташтыра һәм уны төрки сығанаҡлы тип һанай (ЭСТЯ, 1978, 38-40; ДТС, 1965, 82; Юдахин, 1965, 101; Әхмәтьянов, 2015(1), 154; Федотов, 1996, 407; Капаев, 2012, 110). Әйтергә кәрәк, *baq/baγ/paq* тамыры төрки телдәренең барыһында ла тип әйтерлек бар. Уның Э.В. Севортян һүҙлегендә 10-дан артыҡ мәғәнәһе күрһәтелгән. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: ҡарау, күреү, күҙ ташлау, күҙәтеү, иғтибарҙы йүнәлтеү, ҡарап тәрбиәләү, им итеү, имләү, күрәҙәлек итеү һ.б. Был мәғәнәләр араһында магик имләү, күрәҙәлек итеү кеүектәр ҙә үҙ урынын алған. Ә *баҡсыларга* килгәндә инде, улар ғәҙәти булмаған, мөғжизәле күреүгә, ҡарауға һәләтле, тиҙәр. Хатта диалекттарҙа бағымсыны ҡараусы, бағыусы, күремсе тип тә йөрөтәләр. Шулай итеп *багымсы, баҡсы* бик ҡатмарлы персонаж. Ул боронғо ҡамдар, шамандар функцияһын үтәгән персонаж. Шуға ла ул имсе лә, белемсе лә, күрәҙәсе лә, юраусы ла, ырымлаусы ла.

Шулай итеп, башҡорт мифологияһының имселәр персонаждары күп төрлө. Функциональ күҙлектән уларҙың 2 төркөмгә бүленеүе күренә. Беренсе төркөмгә тик магик дауалау, им итеү, имләү менән генә шөғөлләнгәндәр ҡарай, уларҙың махсуслашыуы ихтимал. Икенсе төркөмгә дауалауҙан тыш күрәҙәлек ҡылыу, юрау, ырымлау кеүек магик йолалар менән шөғөлләнеүселәр ҡарай. Лексик күҙлектән ҡарағанда, им-том лексикаһы башҡорт телендә бик бай һәм боронғо. Башҡорт теленең им-том лексикаһының башҡа төрки телдәрҙә, ҡомартҡыларҙа, төрки булмаған телдәрҙә параллелдәре бар.

**ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ СЫҒАНАҠТАР**

АСҠАРОВА, Ф., *Асҡарова Ф. Баймаҡ р-ны Һәмән ауылы.*

БИТК (2006), *Башҡорттарҙың им-том китабы*, Хисамитдинова Ф. Ғ. Өфө.

БУТАНАЕВ, В. Я. (1999), *Хакасско-русский историко-этнографический словарь*, Абакан.

БХИ (1995), *Башҡорт халыҡ ижады*, Т. 1.

ҒАРИПОВА, Т., *Ғарипова Таңсулпан Хисбулла ҡыҙы, яҙыусы.*

ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, М., *Ғиззәтуллина Мәрхәбә, Учалы р-ны Миндәк ҡасабаһы.*

ДАЯН, Ҡ., *Даянов Ҡадир Хәким улы, яҙыусы*, шағир.

ДТС (1969), *Древнетюркский словарь. Л.*

ИЛҺАМОВА, З. С. (1996), *Белорет р-ны Инйәр ҡасабаһы.*

ЙЫЛАЙЫР ф. (2006), *Экспедиция материалдары, 2003: Йылайыр районы*, Өфө.

КАПАЕВ, И. (2012) , *Ногайские мифы, легенды и поверья. Опыт мифологического словаря*, Москва.

КОНДЫБАЙ, С. (2005), *Казахская мифология. Краткий словарь*, Алматы.

КОТОВ, В. Г. (2006), *Башкирский эпос «Урал-батыр». Историко-мифологические основы.* Уфа.

КРС (1988), *Казахско- русский словарь*, Махмудов Х., Мусабаев Г., Алма-Ата.

МНМ, (1997), Мифы народов мира. В 2 кн. Кн. 2, Москва.

МӘРГӘН К. , Кирәев Әхнәф Нурый улы, яҙыусы, ғалим.

СИГТЯ (2006), *Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык , основа. Картина мира пратюркского этноса*. Москва.

СУЛЕЙМАНОВА, М. Н. (2005), *Доисламские верования и обряды башкир*, Уфа.

ТОЙШАНУЛЫ, А. (2016), *Тойшанулы Түрік-моңгол мифологиясы*, Өскемен.

*Трад. Мир.* (1990) , Октябрьская И. В. Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири. САГАЛАЕВ А. М., Знак и ритуал, Новосиб.

ТТАС (2005), *Татар теленең аңлатмалы сүзлеге*, Казан.

УРМАНЧЕ, Ф. (2008, 2009, 2011), *Татар мифологиясе. Энциклопедик сүзлек.* 3 томда. Т. I. Казан, 2008, Т. II. Казан, 2009, Т. III. Казан, 2011.

ФЕДОТОВ, М. Р. (1996), *Этимологический словарь чувашского языка*, В 2 т. Т. I. Чебоксары. 1996, Т. II. Чебоксары, 1996.

ФУНК, Д. А. (2005), *Миры шаманов и сказителей*, Москва.

ХИСАМИТДИНОВА, Ф. Г. (2010), *Мифологический словарь башкирского языка*, Москва.

ХИСАМИТДИНОВА, Ф. Г. (2015), *Башҡорт мифологияһы һүҙлеге*, Өфө.

ХИСАМИТДИНОВА, Ф. Г. (2016), *Мифологическая лексика башкирского языка (в этнолингвистическом освещении)*, Уфа.

ШУКУРОВ, А. (1995), *Мифолоҝиjа. 6 китапта*, I кит. Бакы.

ШӘМИҒОЛОВА, Ә. (1908), *Учалы р-ны Ҡарагужа ауылы.*

ЭКСПЕД…, 1986-1995; 1999-2010 , 1986-1995; 1999-2010 йылғы экспедиция материалдары.

ЭСТЯ (1974), *Этимологический словарь тюркских языков.*, Севортян Э. В., Общетюркские и межтюркские основы на гласные. Москва.

ӘХМӘТЬЯНОВ, Р. Г. (2015), *Татар теленең этимологик сүзлеге*, 2 т. Т. I. Казан, 2015; Т. II. Казан, 2015.

ЮДАХИН, К. К. (1965), *Киргизско-русский словарь*, Москва.

ЯКУТСКИЕ (2004) , *Якутские мифы-Саха ос-номохторо.* Новосиб.

ЯҢАУЫЛ ф., (2009) , *Экспедиция материалдары, 2005: Яңауыл районы*. Өфө.

ÖGEL, B. (1993), *Türk mifolojisi*, Ankara.